Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
«Средняя общеобразовательная школа села Бугульчан
муниципального района Куюргазинский район
Республики Башкортостан»

СОГЛАСОВАНО
Зам.директора по УВР:
Григоренко С.В. _________
«____»______________ 2020г.

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ с.Бугульчан
Юсупова А.З. ___________________
Приказ № ___ от «___»________ 2020 г.

Рассмотрено на ШМО учителей
Социально-гуманитарного цикла
Руководитель ШМО
Яппарова З.Р.______________
Протокол №__ от «__» _______ 2020г.

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**

**по башкирскому (государственному) языку для 7 класса**

**Составила:**
Мурзагулова Г.Н.,
Учитель башкирского языка
первой квалификационной категории.

Для реализации рабочей программы используется УМК
З.М.Габитовой, М.Г.Усмановой. – Уфа, Китап, 2017

Бугульчан - 2020

## 1.Уҡыу предметын өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре.
### Шәхси һөҙөмтәләр

Башҡорт телен 7-се класта өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә: донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү; үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу; телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү; башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

### Метапредмет һөҙөмтәләр

Уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;
уҡыусының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;
уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

**Предмет һөҙөмтәләре**

башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау, белешмә биреү; (курс йөкмәткеһе кимәлендә)

**А. Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)**

**<u>Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:</u>**

***һөйләү телмәрендә:***

- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;
- элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы;
- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

***уҡыуҙа:***

өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

***яҙма телмәрҙә:***

яҙыу техникаһына эйә булыу;
бер телдән икенсе телгә тәржемә итә белеү;
үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

**<u>Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү).</u>**

- башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
- төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡабатлау, ҡулланыу;
- лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

**<u>Социомәҙәни компетенция.</u>**

- географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

**Б. Танып белеү сфераһы:**

- айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;
өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү, тәржемә итә белеү;
- ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү;

**В. Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:**

башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү;

балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**Г. Эстетик сферала:**

башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;
балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты танырға өйрәнеү.

**Д. Хеҙмәт сфераһында:**

- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

## 2.Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Яңынан мәктәпкә – 5 сәғәт.**

5-6-сы кластарҙа алған белемдәрҙе тулыландырыу. Был тема буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә. Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала. Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла. Көҙ, көҙгө эштәр, уңыш йыйыу темаһы төп урындарҙың береһен алып тора.

Мәктәп, уҡыу, китап, икмәк, уңыш, емеш-еләк тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар менән танышыу.

Грамматика:

6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Ауыл тормошо. Ҡылым. һүҙбәйләнеш – 3 сәғәт.**

Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләр үткәреү. Игенсе эшенең нескәлектәрен һөйләү. Ауыл тормошоноң ҡала тормошонан айырмалы яҡтары тураһында аңлатыу. Ауыл еренән сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең тормош юлы менән таныштырыу, осрашыуҙар ойоштороу. Был тема буйынса яҙылған әҫәрҙәр уҡыу.

Грамматика:

Ҡылым. һүҙбәйләнеш. һөйләм төҙөлөшө.

Яңғыҙлыҡ исемдәр.

**Проект эше. “Башҡортостан тәбиғәте”**

**Башҡортостан буйлап сәйәхәт – 3 сәғәт.**

Тыуған илебеҙ – Башҡортостаныбыҙ тураһында уҡыусыларҙың белемен тәрәнәйтеү. Башҡортостаныбыҙҙың байлығы, урмандарыбыҙҙың, яландарыбыҙҙың киңлеге, һыуҙарыбыҙҙың таҙалығы, тәбиғәтебеҙҙең гүзәллеге, күп милләтле халҡыбыҙҙың дуҫлығы тураһында әңгәмәләшеү.

Грамматика:

Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр.

**Проект эше. “Тыуған ерем – Башҡортостан”**

**Спорт. Спорт кәрәк-ярактары, һөйләм төрҙәре – 5 сәғәт.**

Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был турала уҡыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Уҡыусылар үҙҙәре спорт менән ҡыҙыҡһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле-радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү.

Башкортостанда спорт төрҙәре. Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр.

Грамматика:

Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәреф, өндәре, һөйләм төрҙәре.

**Проект эше. “Һаулыҡ – ҙур байлыҡ”**

**Мин һәм беҙҙең ғаилә Ҡылым. Ҡылымдарҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше – 5 сәғәт**

Уҡыусы үҙенең ғаиләһе тураһында тулы һәм иркен һөйләй белергә тейеш. Сөнки был тема йылдан-йыл ҡабатлана. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү. Ғаилә, ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәтеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса план төҙөргә өйрәтеү, план буйынса һөйләү. Телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар бирелә. Был бүлектә билдәле рәссамдарҙың әҫәрҙәре күп кенә урын алған. Картинаны ҡарай, аңлай һәм уның йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү.

Грамматика:
Ҡылым. Ҡылымдарҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше.
Әсәй, өләсәйҙәрҙең изгелеге, ҡәҙере хаҡында әҫәрҙәр уҡыу, йөкмәткеһе өҫтөндә эш төрҙәре башҡарыу, һүҙлек байлыҡтарын арттырыу. "Катын-ҡыҙҙар байрамы тураһында әңгәмәләр, иртәлектәр үткәреү, данлыҡлы ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашыуҙар ойоштороу.
Грамматика:
Теркәүес тураһында төшөнсә. Теҙеү теркәүестәре.
**Сәнғәт оҫталары. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре – 4 сәғәт.**
Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән йырҙар өйрәнеү. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙары әҙерләү.
Грамматика:
Эйәртеү теркәүестәре. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Теркәүес темаһын нығытыу.
**Проект эше “Сәнғәт оҫталары”**

**Бәйләүестәр. Исемең матур, кемдәр ҡушкан? – 2 сәғәт.**
Исемдәрҙә - ил тарихы Был тема кеше исемдәренән башҡа тау, ер, һыу атамалары мөнән берлектә алып барыла. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ-фиғеленә тәьҫир итеүе. Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар һөйләү, әҫәрҙәр уҡыу. Атамалар буйынса легендалар, риүәйәттәр уҡыу ҙа дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә ярҙам итәсәк.
«Исемдәрҙә – ил тарихы», «Исемең матур, кемдәр ҡушҡан?» темаһына иртәлектәр үткәреү, уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтерергә, кеше алдында сығыш яһау өсөн ярҙам итәсәк.
Грамматика: Бәйләүестәр. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһен ҡабатлау.
**Борон-борон заманда... Киҫәксә тураһында төшөнсә – 3 сәғәт.**
Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, уҡыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү маҡсат булып тора. Күберәк иғтибарҙы тексты аңлы ҡабул итеү һәм йөкмәткеһен һөйләй белеүгә йүнәлтеү. Бында башҡорт халыҡ әкиәттәренән башҡа, Ф.Туғыҙбаеваның «Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?» әкиәте лә урын алған. Уларҙың айырмаһын билдәләп үтеү кәрәк.
Грамматика:
Киҫәксә тураһында төшөнсә.Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы.
**Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ – 4 сәғәт.**
Иң төп темаларҙың береһе - берҙәмлек, дуслык, тыныслыҡ. Бында тик кешеләр араһындағы дуҫлыҡ тураһында ғына һөйләшеү бармаясаҡ, ә халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр ҙә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Был тема буйынса уҡыусыларҙы аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә өйрәтеү. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу, әңгәмә ойоштороу.
Грамматика:
Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Ымлыҡтар. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

7 класс өсөн телмәр күнекмәләре:

- Өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен белеү;
- Яҙыусы ижад иткән художестволы картиналарҙы уйлап күҙ алдына баҫтырыу;
- Эпик һәм лирик әҫәрҙе айыра белеү;

-Художестволы, фәнни популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып, етеҙ уҡыу;

- Художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;
- Ҙур булмаған хикәйәләрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү.
- Йәмғиәт тормошонда телдең роле; туған телдең әһәмиәте;
- Фонетика, телмәр өндәре, ижек, баҫым, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр;
- Графика, алфавит; хәрефтәрҙең өндәрҙе сағылдырыуы төшөнсәләре;
- Лексика; һүҙҙең лексик мәғәнәһе; һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе; синоним, антоним, омоним;
- Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше, күплек һәм килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы;
- Ҡылымдарҙың заман, һан, зат менән үҙгәреше;
- Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙың яҙылышы, һөйләмдәге роле.
- Ижади диктанттар, изложениелар һәм иншалар яҙыу.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була**.**

   Уларға түбәндәгеләр инә:
   - башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
   - тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
   - дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
   - һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
   - тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.
2. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
3. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

-карточкалар менән эш;

-тест;

-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;

-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;

-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:

-һүҙлек диктанты;

-һөйләмдәр төҙөү;

-һүҙлек менән эш;
-һүрәтләү иншаһы;
-синквейн төҙөү (слайд төҙөү: шәжәрәләр, минең ғаиләм …)

## Уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау нормалары.

**1. Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау.**

*Уҡыу техникаһын тикшереү.*

Уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе тотош уҡыу. Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм ҡыҫҡа текстарҙы аңлы уҡыу. Дөрөҫ интонация һәм пауза менән уҡыу. Аңлы һәм тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.

*Ҡыскырып уҡыу.*

Ижекләп уҡыуҙан уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә тотош уҡыуға күсеү. Уҡыу тиҙлеген эҙмә-эҙлекле үҫтереү.

*Эстән уҡыу.*

Эстән уҡығанда әҫәрҙең мәғәнәһен аңлау. Уҡыуҙың төрөн билдәләү. Текстан кәрәкле информация таба белеү.

Балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

| Класс | Һүҙ | Билдә | Эстән уҡыу |
|---|---|---|---|
| 7 | 95-110 | 300-320 | 160-180 |

***2. Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары.***

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:

1) диктант;
2) инша
3) изложение

Һаналған яҙма эштәрҙең башланғыс кластарҙа үткәрелә торғандары элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыла. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, ҡағиҙәләрҙе ҡабатлау һ.б.

**Контроль характерҙағы яҙыу эштәренең һаны уҡыу йылы эсендә түбәндәгесә тәкдим ителә:**

| Эш төрҙәре | 7 класс |
|---|---|
| Диктант | 3 |
| Изложение | - |
| Тәржемә | 1 |
| **Бөтәһе** | **4** |

**Контроль диктанттар текстарының күләме түбәндәгесә билдәләнә:**

| Класс | Һүҙлек диктанты | Диктант | Изложение | инша |
|---|---|---|---|---|
| 7 | 18-20 | 70-75 | 50-55 | 60-65 |

3. Календар – тематик план

| № | Тема | Сәғәт | Дик тант | Тәржемә | инша |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Яңынан мәктәпкә. | 5 | | **1** | |
| 2 | Ауыл тормошо. Ҡылым. Һүҙбәйләнеш | 3 | | | |
| 3 | Башҡортостан буйлап сәйәхәт. Исем. | 3 | | | |
| 4 | Мин һәм беҙҙең ғаилә Ҡылым. Ҡылымдарҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше | 5 | | | |
| 5 | Спорт. Спорт кәрәк – яраҡтары. | 5 | 1 | | |
| 6 | Сәнғәт оҫталары. | 4 | 1 | | |
| 7 | Исемдәрең матур, кемдәр ҡушҡан? | 2 | | | |
| 8 | Борон-борон заманда. | 3 | | | |
| 9 | Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ. | 4 | 1 | | |
| 10 | Бөтәһе | 34 | 3 | 1 | - |

**Ҡушымта 1.**

**башҡорт(дәүләт) теленән календарь-тематик план**

Йылына 34 сәғәт, аҙнаһына 1 сәғәт

| № | Тема | Сәғәт һаны | Дата | | иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План | факт | |
| | **Яңынан мәктәпкә – 5с.** | | | | |
| 1 | Башҡорт теле дәрестәрендә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре. Белем көнө. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 03.09.2020 | | |
| 2 | М.Кәрим "Уҡытыусыма". Сифат дәрәжәләре. | 1 | 10.09 | | |
| 3 | **Инеш контроль эш. Тел – халыҡ байлығы (тәржемә)** | 1 | 17.09 | | |
| 4 | Хаталар өҫтөндә эш. Алтын көҙ. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | 24.09 | | |
| 5 | Экскурсия. Беҙҙең яҡтарҙа көҙ. | 1 | 01.10 | | |
| | **Ауыл тормошо – 3с.** | | | | |
| 6 | Баҫыу эштәре. Текст. | 1 | 08.10 | | |
| 7 | "Бал ҡорто". Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 15.10 | | |
| 8 | **Проект эше. "Башҡортостан тәбиғәте"** | 1 | 22.10 | | |
| | **Башҡортостан буйлап сәйәхәт – 3с.** | | | | |
| 9 | "Тыуған ерем – Башҡортостан". Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | 12.11 | | |
| 10 | Р.Ғарипов "Урал йөрәге". Х.Назар "Урал имәне". Ҡылым. | 1 | 19.11 | | |
| 11 | **Проект эше. "Тыуған ерем – Башҡортостан"** | 1 | 26.11 | | |
| | **Спорт. Спорт кәрәк – яраҡтары – 5с.** | | | | |
| 12 | Башҡортостан ҡаларында спорт. Һүҙлек менән эш. | 1 | 03.12 | | |
| 13 | Башҡортостан чемпиондар иле. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 10.12 | | |
| 14 | Милли уйындар.**Проект эше. "Һаулыҡ – ҙур байлыҡ"** | 1 | 17.12 | | |
| 15 | **Контроль диктант "Башкортостан – чемпиондар иле"** | 1 | 24.12 | | |
| 16 | Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 14.01 | | |
| | **Мин һәм беҙҙең ғаилә – 5с.** | | | | |
| 17 | К.Шафиҡова "Әсәй күҙҙәре". Ҡылым. | 1 | 21.01 | | |
| 18 | "Ҡошҡа әйләнгән әбей" әкиәт. Ҡылымдың заты, һаны, заманы. | 1 | 28.01 | | |
| 19 | Шәжәрә. Ҡылым. | 1 | 04.02 | | |
| 20 | Беҙҙең әсәй. Теркәүестәр. | 1 | 11.02 | | |
| 21 | Ҡәнәфер сәскәһе. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 18.02 | | |
| | **Сәнғәт оҫталары – 4с.** | | | | |
| 22 | Х.Әхмәтов "Тыуған ауылым". Эйәртеү теркәүестәре. | 1 | 25.02 | | |
| 23 | Сәнғәт оҫталары. **Проект эше "Сәнғәт оҫталары"** | 1 | 04.03 | | |
| 24 | Бейеүсе Рәшиҙә Туйсина. | 1 | 11.03 | | |
| 25 | **Контроль диктант "Шихандар"** | 1 | 18.03 | | |
| | **Исемең матур, кемдәр ҡушкан – 2с.** | | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 26 | Хаталар өҫтөндә эш. Исемдәрҙә – ил тарихы. Бәйләүестәр. | 1 | 25.03 | | |
| 27 | Башҡорт исемдәре. Бәйләүестәр. | 1 | 08.04 | | |
| | **Борон-борон заманда – 3с.** | | | | |
| 28 | “Ҡан-ҡәрҙәш” әкиәте. Киҫәксә. | 1 | 15.04 | | |
| 29 | Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы? | 1 | 22.04 | | |
| 30 | Йомаҡтар. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 29.04 | | |
| | **Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ – 5 с.** | | | | |
| 31 | Ш.Бикҡол “Тыныслыҡ кәрәк” | 1 | 06.05 | | |
| 32 | Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ. Мөнәсәбәт һүҙҙәр. | 1 | 20.05 | | |
| 33 | **Контроль диктант “Халыҡтар дуҫлығы”** | 1 | 27.05 | | |
| 34 | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡабатлау | 1 | | | |
| | | | | | |

**Иҫкәрмә:** план буйынса – 34 сәғәт, фактик -33 сәғәт (1 сәғәт – 13 май – Ураза байрам)

**Башҡорт теленән уҡыусыларҙың контроль эштәрен баһалау нормалары**
**Контроль күсереп яҙыу текстарын баһалау**

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе уҡыусылар өсөн дәрестәрҙә текстарҙы күсереп яҙыу киң ҡулланыла. Уҡыусылар дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрәләр, бигерәк тә башҡорт телендәге үҙенсәлекле хәрефтәрҙе, үтелгән орфограмманы ғәмәлдә ҡулланырға, һүҙҙәрҙе юлдан-юлға дөрөҫ күсерергә, һүҙҙәрҙе уҡып яҙма телмәрҙә хатаһыҙ яҙырға өйрәнәләр. Күп тапҡырҙар яҙыу һөҙөмтәһендә, балаларҙа дөрөҫ яҙыу күнекмәләре барлыҡҡа килә. Шулай уҡ күсереп яҙыу эше уҡыусыларҙың иғтибарын, хәтерен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Күсереп яҙыу текстары дәрестә үтелгән грамматик һәм лексик темалар менән бәйле алына. Күсереп яҙғанда текст һәр уҡыусының алдында булырға тейеш. Индивидуаль карточкалар, дәреслектән күнегеүҙәр алынырға мөмкин. Әгәр ҙә өҫтәлмә эш алынмаһа, күсереп яҙыу тексы бер генә билдә менән баһалана.

**«5» билдәһе** төҙәтеүҙәр, бысратыуҙар булмаған, йә 1 пунктуацион хата булған эшкә,
**«4» билдәһе** 2 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 4 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 6 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 3 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
**«3» билдәһе** 3 орфографик, 4 пунктуацион йә 7 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 2 орфографик, 4 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

Әгәр тексты күсереп яҙыуҙан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

**Диктанттарҙы баһалау**

Уҡытыусы тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим итәләр. Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына*аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

**Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә**:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.
Әгәр ҙә өҫтәлмә эш алынмаһа, диктант бер генә билдә менән баһалана.
**«5» билдәһе** тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,
**«4» билдәһе** 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
**«3» билдәһе** 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.
**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

## Иншаларҙы һәм изложениеларҙы баһалау

Инша һәм изложениелар яҙҙырыу аша уҡыусыларҙың:

1. теманы аса белеүе, тел сараларын инша йәки изложениеның темаһына һәм уларҙағы төп фекерҙе аңлатыу бурыстарына ярашлы һайлай белеүе,
2. яҙғанда, грамматик нормаларға һәм дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләренә таянып эш итеүе тикшерелә. Шуның өсөн иншаға ла, изложениеға ла һәр ваҡыт ике билдә ҡуйыла. Беренсе билдә менән- уларҙың йөкмәткеһе һәм телмәр төҙөлөшө, икенсе билдә менән грамоталылыҡ кимәле баһалана.
3.

**Баһаларҙың төп критерийҙары**
Йөкмәтке һәм телмәр төҙөлөшө
Грамоталылыҡ
Баһалау
1.Яҙма эштең йөкмәткеһе тулыһынса темаға тура килһә,
2. Фактик хата булмаһа,
3.Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле бирелһә (план буйынса йәки планһыҙ),
4. Эш лексик яҡтан бай булыуы менә айырылп торһа,
5.Эш темаға һәм төп фекерҙе аңлатыу маҡсатына ярашлы стилдә яҙылһа,телмәре тасуири булһа,
Иҫкәрмә. Бер генә телмәр хатаһы һәм бер генә йөкмәтке хатаһы булған яҙма эшкә «5» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
Яҙма эштә 1 орфографик,йәки 1 пунктуацион,йәки 1 грамматик хата (тимәк,бөтәһе 1 генә хата) булһа
«5» билдәһе ҡуйыла

1. Эштең йөкмәткеһе,нигеҙҙә,темаға тура килһә (теманан ситкә китеү бик аҙ булһа),
2. Йөкмәтке, нигеҙҙә,дөрөҫ бирелһә,әммә эштә бик аҙ булһа ла,фактик хаталар осраһа,
3. Төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклегендә тупаҫ булмаған етешһеҙлектәр генә булһа,
4. Яҙма эш,нигеҙҙә,синоним һүҙҙәргә һәм синонимик грамматик формаларға бай булһа,
5. Эш бер төрлө стилдә яҙылыуы һәм тасуири булыу менән айырылып торһа,

Иҫкәрмә. Яҙма эштең телмәр хаталары өстән дә,йөкмәткеһендәге хаталар икенән дә артмаһа,уға «ғ» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
Яҙма эштә 2 орфографик һәм 2 пунктуацион хата, йәки 1 орфографик һәм3 пунктуацион хата булһа, йәки бер орфографик хатаһы ла булмайынса, пунктуацион хаталары 4-тән, һәм грамматик хаталары 2-нән артмаһа,
«4» билдәһе ҡуйыла

1. Яҙма эштә теманы ситкә китеүгә ҡараған етди хаталар булһа,
2. Төп фекер дөрөҫ аңлатылһа,әммә эштә фактик хаталар ебәрелгән булһа,
3. Айырым өлөштәрендә төп фекерҙе аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,
4. Яҙма эш бер төрлөрәк типтағы синтаксик конструкцияларҙан торһа,һүҙлеге ярлы,һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙа хаталар булһа,
5. Эш тема һәм уны аңлатыу (асыу)талап иткән бер төрлө стилдә яҙылмаһа,

<u>Иҫкәрмә.</u> Яҙма эштәге телмәр хаталары 5-тән, йөкмәткелеге хаталар 4-тән артмаған хәлдә лә, эшкә **«3»** билдәһе ҡуйырға мөмкин.

Яҙма эштә **4** орфографик һәм **4** пунктуацион хата,йәки 3 орфографик һәм 5 пунктуацион хата, йәки 7 пунктуацион хата һәм орфографик хатаһыҙ булһа,шулар өҫтөнә 4 грамматик хата ебәрелһә,

**«3»** билдәһе ҡуйыла

1. Яҙма эш темаға тура килмәһә,
2. Фактик хаталар күп булһа,
3. Эштең бөтә өлөштәрендә фекер аңлатыу эҙмә-эҙлеклеге боҙолһа,текст өлөштәре араһында бәйләнеш булмаһа,плпнға ярашһыҙ булһа,
4. һүҙлеге ғәҙәттән тыш ярлы булһа, эш үҙ-ара бәйләнеше булмаған бер төрлө конструкциялы ҡыҫҡа һөйләмдәрҙән торһа,һүҙҙәр ҡулланышында ла хаталр осраһа,
5. Эштә стилдең бер төрлөлөгөнә ирешелмәгән булһа,

**Ҡушымта 2.**

**7 класс уҡыусыларының белемдәрен баһалау өсөн контроль эштәр.**

**1.** 1.**Инеш контроль эш “Тел – халыҡ байлығы” (тәржемә)**
Маҡсат: уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау.

**Тел –халыҡ байлығы.**

Тел – халыҡтың иң ҙур хазинаһы. Бик тә ҡәҙерле нәмәне хазина тиҙәр. Ул берәмләп, бөртөкләп йыйыла. Мәҫәлән, алтын, көмөш – ер байлығы. Ә тел – халыҡ байлығы. Ул быуаттар буйына тупланған, халыҡты халыҡ итеп, милләт итеп туплаған.

**2. Контроль диктант “Башҡортостан – чемпиондар иле”**
Маҡсат: уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау, үтелгәндәрҙе ситемалаштырыу.

**Башҡортостан – чемпиондар иле.**

Башҡортостан ере бик күп Олимпия уйындары еңеүселәрен тәрбиәләне. Шундайҙар араһында Европа һәм донъя чемпионы – теннисcы Андрей Черкасов, биатлон буйынса донъя чемпионы – Галина Куклева, ике тапҡыр донъя еңеүсеһе – көрәшсе Александр Батталов, еңел атлетика буйынса донъя еңеүсеһе – Людмила Матвеева. Боҙ өҫтөндә мотоцикл ярыштары буйынса беҙҙең яҡташыбыҙ Ғабдрахман Ҡадыров алты тапҡыр донъя чемпионы исемен яуланы!

**3.Контроль диктант “Шихандар”**
Маҡсат: уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау, үтелгәндәрҙе ситемалаштырыу.

**Шихандар.**

Ишембай яғында риүәйәттәргә ингән Торатау тигән атаҡлы тау бар. Ул геологтар өсөн дә бик ҡыҙыҡлы, сөнки диңгеҙ төбөндә үҫеп сыҡҡан ҙур риф массивы булып тора.

Был ҙур бейек ҡоролмалар, миллион йылдар үткәс, эзбизташ тауына әүерелә. Ҡайһы саҡта, Торатау кеүек, ер өҫтөндә тороп ҡала.

Быңдай яңғыҙаҡ тауҙарҙы икенсе төрлө шихандар тип йөрөтәләр. Торатауҙан башҡа, ул яҡтарҙа тағы өс шихан бар: Шахтау, Ҡуштау, Йөрәктау. Был атаҡлы тауҙарҡың фотоһүрәттәре башҡа илдәрҙә сыҡҡан ҡайһы бер геология дәреслектәренә лә индерелгән.
Өҫтәлмә эш: яңғыҙлыҡ исемдәренең аҫтына һыҙығыҙ.

**4.Контроль диктант “Халыҡтар дуҫлығы”**
Маҡсат: уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау, үтелгәндәрҙе ситемалаштырыу.

**Халыҡтар дуҫлығы.**

Башҡортостанда төрлө милләт халҡы йәшәй һәм эшләй.
Бәләбәй районы Старо-Семенкино ауылында йәшәүсе Федор Васильевичтың ҡатыны – милләте менән татар. Уларҙың ун балаһы бар. Өлкән улы –мордва ҡыҙына, икенсе улы Гурьян – украин ҡыҙына, өсөнсө улы Виктор татар ҡыҙына өйләнгән. Ҡыҙҙары Раиса һәм Ольга рус егеттәренә кейәүгә сыҡҡан. Моисей һәм Евстафий исемле улдары сыуаш ҡыҙҙарын алған. Шулай бер ғаиләлә биш милләт вәкиле йыйылған. Беҙҙә ундай ғаиләләр аҙ түгел.
Өҫтәлмә эш: ҡылымдарҙы билдәләгеҙ.

**Ҡулланылған әҙәбиәт исемлеге**


1.Ғәбитова З.М., Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н., Йәғәфәров Р.Ғ, Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу: Методик күрһәтмә. – Өфө: БМҮИ, 2008.

2. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-11 синыф уҡытыусылары өсөн ҡулланма. – Өфө: Китап, 2009.